Приложение к ООП СОО
МБОУ СОШ д.Таштимерово

**Рабочая программа**

**по учебному предмету «Родная (башкирская) литература**
**для 10-11 класса**

**Аңлатма.**

Эш программаһы түбәндәге норматив –хоҡуҡ документтарына нигеҙләнеп төҙөлдө:

1.Дәүләт белем биреү стандарттарының Федераль компоненты ( Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының №1089 бойороғо менән 5.03.2004); үҙгәрештәр менән:приказ №164 , 03.06.2008; приказ №320, 31.08.2009; приказ № 427, 19.10.2009; приказ № 39 , 24.01.2012; приказ № 69 , 31.01.2012.

2. Рәсәй Федерацияһының “Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында” Федераль законы 29.12.2012 №273-ФЗ.

3.Башҡортостан Республикаһының”Башҡортостан Республикаһының Мәғариф тураһында” законы 01.07.2013 №696-З

4.”Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” законы 25 октябрь 1991 №1807-1 (24.07.98, 11.12.2002 йыл үҙгәртелгән)

5.”Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында” законы 15.02.1999йыл №216-З

6.Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы 31.12.2009 йыл №УП-730

7.2016-2017 уҡыу йылына мәктәптең уҡыу планы (приказ №3,30.08.2016)

8. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған М. Ғималова(V-VIII кластар),Ғ.Хөсәйенов (IX-XI кластар бүлеге) А.Байғарин (Х. Назаров ижады)- Башҡорт әҙәбиәтенән программалар.Өфө: Информреклама,2003.

9. Дәреслек: , Ғ.Б.Хөсәйенов, М.Ғ.Ғималова, Р.З.Шәкүр. Башҡорт әҙәбиәте. Урта мәктәптең 10-сы класы өсөн дәреслек.-Өфө:Китап, 2012
Әҙәбиәт – хрестоматия.Урта мәктәптең 10-сы класы өсөн/Төҙ.Ғ.Б.Хөсәйенов,М.Ғ.Ғималова, Р.З.Шәкүров.- 3-сө баҫма.-Өфө:Китап,2012.-336 бит.

ХөсәйеновҒ.Б, БайымовР.Н.Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте:урта мәктәптең 11-се класы өсөн дәреслек.- Өфө:Китап, 2012.
Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте.Хрестоматия.Урта мәктәптең11-се класы өсөн/Авт.-төҙ. Ғ.Б.Хөсәйенов, Р.Н. Байымов.- Өфө:Китап, 2012.-296 бит

Эш программаһы 10-11 се класта 68 сәғәткә (аҙнаға 2 сәғәт)

## I. 10-11–се класс уҡыусыларының белем һәм күнекмәләренә төп талаптар:

**Уҡыусылар түбәндәгеләрҙе белергә тейеш:**

Матур әҙәбиәттең үҙенсәлектәрен аңларға

Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын,исемен һәм исемдәрҙең мәғәнәһен; өйрәнелгән әҫәрҙәге ваҡиғаларҙы һәм геройҙарҙы(сюжетты,геройҙарҙы,геройҙар менән ваҡиғаларҙыңүҙ-ара бәйләнешен);

өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең темаһын,композицион үҙенсәлектәрен; драматик һәм лиро-эпик әҫәрҙәрҙең характерлы үҙенсәлектәре;

әҫәрҙең художестволы образы,темаһы, идеяһы, сюжеты, композицияһы хаҡындағы төшөнсәләрҙең билдәләре:

программа тарафынан ятлау өсөн тәкдим ителгән әҫәрҙәрҙең текстары

**1-се төр күнекмәләр**

-яҙыусы ижад иткән картиналарҙы уйлап күҙ алдына баҫтырыу;

-әҫәрҙә ҡатнашыусыларҙы ҡылыҡһырлауҙа мөһим урын тотҡан эпизодтарҙы айырып күрһәтеү;

-өйрәнелгән әҫәрҙә сюжет элементтарының идея-художество урынын билдәләү;

-телдең һүрәтләү сараларының контекстағы идея-художество урынын билдәләү;

-уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау нигеҙендә әҫәрҙең геройын ҡылыҡһырлау;

-авторҙың мөнәсәбәтен асыҡлау маҡсатында өйрәнелгән әҫәрҙең ике геройын үҙ-ара сағыштырыу;

-эпик һәм лиррик әҫәрҙәрҙе айыра белеү;

**2-се төр күнекмәләр**

художестволы, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы ҡыҫҡырып дөрөҫ, етеҙ уҡыу.

художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;

эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен тулы итеп һайлап йәки ҡыҫҡартып телдән йәки яҙма рәүештә һөйләү(изложение төҙөү);

ҙур булмаған эпик әҫәр йәки өҙөктөң планын төҙөй белеү;

үҙ аллы уҡыған әҙәби әҫәр йәки башҡа сәнғәт әҫәрҙәре хаҡында геройҙар һәм ваҡиғаларға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереп телдән (үҙ мөнәсәбәтеңде белдереп) йәки яҙма баһалама биреү;

өйрәнелгән әҫәр буйынса телдән йәки яҙма рәүештә фекер йөрөтөү характерындағы инша яҙыу:

һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға(индивидуаль һәм сағыштырма) ҡылыҡһырлама биреү

-художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;

## II. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

## 10-сы класс

***Инеш (1 сәғәт).***

Совет әҙәбиәте-башҡорт әҙәбиәтенең яңы осоро.

Октябрь революцияһынан һуң яңы йәмғиәт шарттарындағы әҙәбиәттең идея-тематик йөкмәткеһе,йүнәлеше үҙгәреүе. Әҙәбиәттең идеологиялаштырылыуы.

***Башҡорт совет осоро әҙәбиәтенең формалашыуы (1917-1929йылдар)*** Яңы осор әҙәбиәтенең социаль-тарихи ерлеге,уның йүнәлештәре.Тәүге драмалар.20-се йылдарҙа проза,поэзия,драматургияның үҫеше.*Әҙәбиәт теорияһы.*Әҙәби процесс.
***Д.Юлтый.***Биографияһы,эшмәкәрлеге.Шиғырҙары,поэмалары.”Карағол”драмаһы,”Ҡан” романы.
*Әҙәбиәт теорияһы.Художестволы әҙәбиәттең теле.*
***Ә.Вәлиди.***Тормошо,дәүләт эшмәкәрлеге.Ғалимлығы.Китаптары.”Хәтирәләр”ҙең жанр,стиль үҙенсәлеге.
***М.Буранғолов.***Тормош юлы,эшмәкәрлеге.М.Буранғолов-сәсән,фольклорсы.М.Буранғол-драматург.”Башҡорт туйы”драмаһы.
***Ғ.Хәйри.***Биографияһы.Проза әҫәрҙәре.”Боролош”романы.Тарихи осор,төп проблемалары,образдары.
***Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте.***Был йылдарҙаәҙәбиәттә төп тематика,Поэзия.Проза.Драматургия.Репрессияға эләккән яҙыусылар.
***Һ.Дәүләтшина.***Яҙыусының фажиғәле яҙмышы,ҡаһарманлығы.Башланғыс ижады.Хикәйәләре.”Айбикә”повестары.”Ырғыҙ”романының яҙылыу тарихы,идея-тематик йөкмәткеһе.Романда күтәрелгән төп проблемалар,төп образдар.
*Әҙәбиәт теорияһы.*Әҙәби тип.Прототип.Роман-эпопея.
***Әҙәби портреттар.С.Мифтахов***.”Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.
***Ғ.Сәләм.***”Бала”поэмаһы.Ғаилә,бала тураһында.Сәйҙел менән Зәйнәп образдары.Поэманың художестволы үҙенсәлектәре.
***Бөйөк Ватан һуғышы йылдары әҙәбиәте.***Был осорҙа әҙәбиәттең бурыстары,үҙенсәлеге.Оператив жанрҙар.Публицистик поэзия.Очерк жанры.Хикәйәләр,поэма,балладалар.
Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яҙыусылар.
***Р.Нигмәти.***Яҙыусының тормошо һәм ижады.Башланғыс ижады.Утыҙынсы йылдар поэзияһы. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары поэзияһы.”Үлтер,улым,фашисты!”,”Һинең киләсәгеңдән хаттары”.Һуғыштан һуңғы йылдар ижады. “Һаҡмар ҡыҙы” поэмалары.
*Әҙәбиәт теорияһы.*Лирик герой тураһында төшөнсә.
***Баязит Бикбай.***Биографияһы һәм ижад юлы.”Ҡарлуғас”драмаһы. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары ижады.Очерктары. Һуғыштан һуңғы йылдар ижады.Проза.”Аҡсәскә”повесы.”Салауат”драмаһы.
*Әҙәбиәт теорияһы.*Тема.
***З.Биишева.*** Биографияһы һәм ижад юлы.Шиғырҙары.Повестары.”Тылсымлы ҡурай”драмалары.
Трилогия.”Яҡтыға” трилогияһының идея-тематик йөкмәткеһе.Сағылған осор,күтәрелгән проблемалар,образдар системаһы.Халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәше.Художестволы үҙенсәлектәре.
***Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте.***Башҡорт әҙәбиәтенә ҡылыҡһырлама.Поэзия.Проза.Драматургия.
Башҡорт яҙыусыларының икенсе съезы.

***Н.Нәжми***.Биографияһы.,йәмәғәт эшмәкәрлеге. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары ижады. Һуғыштан һуңғы йылдар ижады. Поэма һәм балладалары.”Урал”поэмаһы.”Шағир һәм шаһ”Патриотзм,власть һәм талант проблемалары.Драматургия.
***Үтелгәндәрҙе кабатлау.***

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр.***

***Д.Юлтый.***”Атлан,батыр!”,”Ҡарағол”драмаһынан өҙөк.
***М.Буранғолов.***”Башҡорт туйы”драмаһынан өҙөк.
***Ғ.Сәләм.***”Бала”поэмаһынан өҙөк.
***Һ.Дәүләтшина***.”Ырғыҙ”романынан өҙөк.
***Р.Нигмәти***.”Үлтер,улым,фашисты!”поэмаһынан өҙөк.

***Кластан тыш укыу өсөн әҫәрҙәр.***
С.Агиш.”Фәтхи һалдат”хикәйәһе.
Я.Хамматов.”Башҡорттар китте һуғышҡа”романы.
Т.Килмөхәмәтов.”Ҡорбан килтереү”портреттар.
“Һуғыш үтте,һағыш ҡалды”очерктар,хәтирәләр
**Яҡташ яҙыусылар ижады – 2 сәғәт**
***Яҙма эштәр***:
инша-2 (өйгә)

**11-се класс**

11 –се класта әҙәбиәт хронологик тәртиптә өйрәнелә, иң күренекле яҙыусылар ижадынан системалы белем бирергә, халҡыбыҙҙың әҙәби – рухи хазиналарын эзмә- эҙлекле күҙ алдына баҫтырырға һәм укыусыны юғары интелектлы, матур зауыҡлы кеше итеп тәрбиәләргә бурыслы.

Эш программаһы хәҙерге әҙәбиәте бүлектәренән тора. Дәреслектең ошо бүлектәренә ярашлы бирелгән сәғәттәр һаны иҫәпкә алынып йыллыҡ план төҙөлдө.

***Хәҙерге әҙәбиәт – 1сәғәт.*** XX быуаттың икенсе яртыһында йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙең әҙәбиәткә йоғонтоһо.70-90сы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәьенең идея-тематик яҡтан яңырыуы,жанрҙарҙың төрлөлөгө.Яңы быуын яҙыусылар. 90сы йылдарҙа әҙәбиәттә яңы осор башланыуы.

***Хәҙерге поэзия.Әҙәби портреттар – 2 сәғәт.*** Хәҙерге поэзияның үҫеше.Лирикала жанрҙар төрлөлөгө,идея-тематик һәм художество яңылыҡтары.М.Кәрим,Р.Бикбаев,Р.Сафин,Х.Назаров шиғырҙарында гражданлыҡ мотивтары.Ғ.Рамазанов,Ш.Бикҡол,Р.Бикбаев,А.Игебаев лиро-эпик жанрҙағы поэмалары.Яңы быуын шағирҙары.Хәҙерге поэмалар. ***Шағирҙар:*** М.Ғәли лирикаһы,поэмалары,Ә.Атнабаев лирикаһы,поэмаһы.Т.Ғәниева”Ҡыпсаҡтар”поэмаһы,Ф.Туғыҙбаева лирикаһы,поэмалары.Ҡ.Аралбай”Таналыҡ тауышы”.

***М.Кәрим-11 сәғәт***.М.Кәримдең биографияһы һәм йәмғиәт эшмәкәрлеге.Тәүге әҫәрҙәре.Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады.”Тәҙрәндә ас та...”,”Трубка”,Сит уттар”,”Ямғыр”,”Мин фронтҡа китәм,иптәштәр!”,”Таш өҫтөндәге гөлдәр”.

“Башҡорт халҡына яуап хат”әҫәренең йөкмәткеһе.Батырлыҡ,мөхәббәт,нәфрәт темаһы.Хат стиле.

“Үлмәҫбай”поэмаларын иҫкә төшөрөү.

Һуғыштан һуңғы ижады.Шиғырҙарында тыныслыҡ темаһы.”Европа-Азия”шиғырҙар циклы.”Ҡара һыуҙар”поэмаһында төп темаларҙың контраст бирелеше:һуғыш һәм тыныслыҡ,батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ.Образдар системаһы.

М.Кәрим-драматург.”Ай тотолған төндә”,”Салауат”,”Ташлама утты,Прометей!”трагедиялары.

“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”повесы.

***Әҙәбиәт теорияһы***.Фәлсәфәүи лирика.

***Р.Ғарипов- 5 сәғәт.*** Биографияһы һәм ижады.Тәүге осор ижады.Шиғыр йыйынтыҡтары.Хикәйәт һәм ҡобайырҙары.”Уйҙарым”,”Аманат”ҡобайырҙары.Поэма һәм балладалары.”Табыныу”, ”Дон-Кихот “поэмалары.”Батырша”балладаһы.Тәржемәләре.

***Хәҙерге проза – 1 сәғәт .*** XX быуат аҙағында оло быуын яҙыусыларының С.Агиш,Ә.Бикчәнтәев,К.Мәргән,Д.Исламов романдары һәм повестары.

Урта һәм яңы быуын яҙыусыларының проза әҫәрҙәре.Очерк һәм публицистиканың үҫеше.

Тарихи романдар.Хәҙерге юмор һәм сатира. ***Прозаиктар.*** Я.Хамматов.Бөртөкләп йыйылған алтын.Б.Рафиҡов.Мажаралы повестар.Т.Ғарипова”Бөйрәкәй”романы.Ғ.ШафиҡовТрихи әҫәрҙәр.

***Ә.Хәкимов-6 сәғәт.*** Биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге.Ә.Хәким-тәнҡитсе,әҙәбиәт белгесе.Башланғыс ижады.Повестары.Ә.Хәким-романист.Тарихи ромндары.”Өйөрмә”романы.Утыҙынсы йылдар фажиғәһе.Образдар системаһы.

***Ғ.Хөсәйенов – 5 сәғәт.*** Әҙиптең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге.Ғ.Хөсәйенов-тәнҡитсе,әҙәбиәт белгесе,әҙип.”Батырҙар ҡиссаһы”,”Тормош”,”Донъя”парсалар китабы.”Ҡанлы илле биш”романы.

***Хәҙерге драматургия- 1 сәғәт.*** Хәҙерге драматургияла күтәрелгән төппроблемалар.Заман темаһы.Драматургияның жанр төрҙәре. ***Драматургтар:*** И.Абдуллин,Н.Асанбаев”Ҡыҙыл паша”,Ф.Бүләков”Йөрәктә ҡалған эҙҙәр”.

***Хәҙерге әҙәбиәт ғилеме һәм тәнҡит.*** ”Башҡорт әҙәбиәте тарихы”алты томлығы.К.Әхмәтйәновтың әҙәбиәт теорияһы буйынса хеҙмәттәре.

***Р.Бикбаев – 4 сәғәт.*** Тормош юлы һәм фәнни эшмәкәрлеге.Шиғырҙар йыйынтығы.”Халҡыма хат”поэмаһы.,”Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ!”поэмаһында социаль,экологик һәм мораль,иҡтисади-этик проблемаларҙың ҡуйылышы.Р.Бикбаевтың ғилми эшмәкәрлеге.

***Н.Мусин – 7 сәғәт.*** Биографияһы һәм ижадыТәүге хикәйәләре.”Зөһрә”повесы.”Шайтан ҡуласаһы”повесы.”Мәңгелек урман”романы.

***А.Абдуллин – 4 сәғәт.*** Яҙыусының биографияһы һәм ижад юлы.”Онотма мине,ҡояш!”,”Ун өсөнсө председатель “драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.Әҫәрҙең популярлығы.

***Р.Солтангәрәев.***- 1 сәғәт. Биографияһы һәм ижадыХикәйәләре.Повестары.”Ханбал”хикәйәһе.

***Д.Бүләков – 4 сәғәт.*** Яҙыусының тормош һәм ижад юлы.”Килмешәк”романы.”Ғүмер бер генә”романы.

***Х.Назар – 1 сәғәт.*** Х.Назарҙың тормошо һәм ижады.Шиғырҙарында тыуған ергә,халыҡҡа һөйөүҙең бирелеше..”Шәмсыраҡ”поэмаһы. Тәржемәләре.

***Өҙәби портреттар – 1 сәғәт.*** Шиғырҙар М.Ғәли “Ҡояш еле”, “Ҡыҙыл үләндәр” поэмалары.
Ә. Атнабаев “Заманзит”
Т.Ғәниева “Ҡыпсаҡтар”
Ф.Туғыҙбаева
К.Аралбай

***Прозаиктар- 1 сәғәт.*** Ғ.Шафиҡов, Я.Хамматов, Б.Рафиҡов, Т.Ғарипова, Т.Ғиниәтуллин

***Драматургтар- 1 сәғәт.*** И.Абдуллин “Йөрәк менән шаярмайҙар”, Н.Асанбаев “Ҡыҙыл паша”, Ф.Бүләков “Йөрәктә ҡалған эҙҙәр”

***Яҡташ яҙыусылар ижады* – 2 сәғәт**
***Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау- 1 сәғәт.***

**Ятлау өсөн әҫәрҙәр.**

М.Кәрим ”Мин фронтҡа китәм,иптәштәр!”шиғыры,.

Р.Ғарипов.”Аманат”,”Уйҙарым”ҡобайырҙарынан өҙөк.

Р.Бикбаев”Халҡыма хат”поэмаһынан өҙөк.

**Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр.**

М.Кәрим.Ғүмер миҙгелдәре.

Р.Ғарипов.Алырымҡош менән Бирмәмҡош.

Р.Бикбаев.Ай күргәндәй,ҡояш алғандай.Һайланма поэтик әҫәрҙәр.

К.Мәргән.Бөркөт ҡанаты.Роман.

Ғ.Ибраһимов.Кинйә.

Р.Солтангәрәев.Оло юлдың туҙаны.

Ҡ.Аралбаев.Таналыҡ тауышы.

Т.Ғарипова.Бөйрәкәй.

Х.НазарАсманға ашыу.шиғырҙар,поэмалар.

Р.Сафин.Ут эсендә бейеү.

Т.Йосопов.Лирик шиғырҙар.

Программаға ярашлы 4 инша,

2 контроль эш ҡаралған.